***Хәйерле көн, һаумыһығыҙ хөрмәтле шиғриәт һөйөүселәр - студенттар һәм уҡытыусылар!***

Беҙ һеҙҙең менән бөгөн китапханабыҙ уҡыу залында Башҡортостандың халыҡ шағиры Р. Бикбаевҡа 75 йәш тулыу айҡанлы шиғыр уҡыусылар бәйгеһенә йыйылдыҡ.

Бәйгелә 1,2,3 курс студенттары көс һынаша. Әйҙәгеҙ, бергәләп уларҙы сәләмләйек! Был студенттарҙы гүзәллеккә битараф булмаған шағирҙарыбыҙ әҫәрҙәрен уҡып илһам, нур, дәрт алыусы нескә күңелле йәштәребеҙ – беҙҙең алмаш тип атарға тулы хоҡуғыбыҙ бар.

Бәйге булғас, унда жюри булырға тейеш. Әйтергә кәрәк, уларға бөгөн бик ауыр эш йөкмәтелә. Беҙҙең тасуири уҡыу сәнғәтенә тәүләп аяҡ баҫыусы студенттары беҙҙең беренсе аҙымдарын баһалаясаҡтар улар. Эш бик яуаплы. Был етди эште башҡаралар:(жюри ағзаларын атау)

Бәйгеселәрҙе баһалағанда, түбәндәге критерийҙарҙы иҫәпкә алабыҙ:

- дикция, шиғырҙың тексын белеү;
- тасуирилыҡ (выразительность), эмоционаллелек;
- артистизм.

Өҫтәлмә приз да бар. Һеҙҙең алдығыҙҙа бәләкәй генә карточкалар таратылған. Унда һеҙ үҙегеҙгә оҡшаған студенттың фамилияһын билдәләп яҙаһығыҙ, иң күп очко йыйыусы «Тамашасы һөйөүе (Приз зрительских симпатий)» номинацияһына лайыҡ була.

Шулай ҙа иң ҙур бүләк – бөгөнгө кисәнән алған тәьҫораттар, шиғыр уҡыу һәм тыңлауҙан алған рухи кинәнес икәнлеген онотмайыҡ. Алдан әйтәм: бөгөнгө бәйгелә кемдер еңеүсе, кемдер ҡатнашыусы, ә еңелеүселәр юҡ!

Һүҙҙе башлайыҡ:

«Ә мин инде бөтә ғүмерем буйы бәйгеләрҙә сапkан ат һымаk... ». Был М.Кәрим һүҙҙәре. Улар тап Р.Бикбаев хаҡында әйтелгән һымаҡ. Ғүмер буйы эштә, ғүмер буйы ижадта, ғүмер буйы бәйгелә...

Ә бөтәһе лә 1938 йылдың 12 декабрендә башлана. Ырымбур өлкәһе Үрге Ҡунаҡбай ауылында Бикбаев Төхвәтулла һәм Рәкиә ғаиләһендә бер малай донъяға килә. Уға Рауил тип исем бирәләр. Бик ҙур матур тарихлы, сәсән телле, бай һәм шәжәрәһе менән дан тоткан ғаиләлә тәрбиәләнә ул. “Ете быуыным” шиғыры шул хаҡта.

Уларҙың ғаилә бәхетен Бөйөк Ватан һуғышы селпәрәмә килтерә. Атаһы 1945йылдың майында һәләк була. 33 йәшендә Рәkиә биш балаһы менән тороп ҡала. Ярай, туғандар ярҙам ҡулы һуҙа. Әсәһе Рәkиә Латып ҡыҙы үҙенең аҙаҡҡы һулышына тиклем Рауил һәм башҡа балаларына терәк, ярҙамсы, кәңәшсе була. Р. Бикбаев әсәһенә бағышлап бик күп шиғыр ижад итә. Шуның береһе- ***“Әсәйемдең әйткән һүҙҙәре”,*** сығыш яһаусы kыҙыбыҙ шиғыр аша үҙенең әсәһен дә иҫкә төшөрөр.

3) Һуғыш килтергән яралар, ғазаптар онотторлоҡ булмай. Шуға күрә шағир ижадында Бөйөк Ватан һуғышы, ветерандар, Еңеү байрамы хаҡында шиғри әҫәрҙәр бихисап. ***«9 Мая»***

4) Р.Бикбаевты беҙ коллегабыҙ тип тә әйтә алабыҙ. Ул Аҡмулла педучилищеһында, унан Өфөлә БДУ-ла уҡый. Шулай ҙа шиғриәт иле уны яҡынараҡ тарта.

Шағир тәүге шиғырынан уҡ тыуған иленең патриоты булып сығыш яһай. ***«Эй, еркәйем»*** шиғырын тыңлайбыҙ.

5) Студент ваҡытында Р.Бикбаев Фәриҙә исемле ҡыҙ менән таныша һәм уға ғашиҡ була. Фәриҙәнең хәтерләүенсә, йәш Рауил уға шиғырҙар яҙа, имтихан бирергә ярҙамлаша, роза сәскәләре бүләк итергә ярата. Шунан улар ғаилә ҡоралар. Мөхәббәт хаҡында бер шиғырын тыңлап китәйек.

***«Һинең менән үткән һәр көнөмдә...»***

6) Йәш ғаиләнең мөхәббәт емеше булып Айҙар исемле улдары донъяға килә. Бикбаевтың аталыk хистәре шиғырҙарында ла сағыла.

***“Бала сағын һөйәм баламдың ”***

7) Һеҙ тыңлаған шиғырҙы яҙғанда Р.Бикбаевтың берҙән-бер ғәзиз улы 30 йәше етмәҫ борон уҡ ата-әсәһен, йәш ғаиләһен ҡалдырып был донъяларҙан китеп барырын башына ла килтермәй. Рауил һәм Фәриҙә Бикбевтарҙың күңел йыуанысы булып ейәндәре ҡала.

Тормош дауам итә. Һәр кешенең юлы, уҙ һайлаған һуҡмағы була. Р.Бикбаевтың да. ***«Минең юлым»***

8) Тормош, йәшәйеш хаҡында уйланыуҙар уның шиғриәтендә айырыуса ҙур урын биләй. ***«То ли старый, то ли новый год».***

9) Р. Бикбааев башҡорт әҙәбиәтендә күренекле шәхескә әүерелә. Бер-бер артлы уның шиғырҙары донъя күрә, уҡыусылар күңелен яулай.

Оҙаҡламай уны Башҡортостан Яыусыһының жюри рәйесе итеп һайлайҙар. Был яуаплы эшкә бәйле уға күп ижадсылар менән арлашырға тура килә. Ул яҙыусылар хаҡында мәкәләләр, ғилми хеҙмәттәр һәм шиғырҙар яҙа. Мәҫәлән «Шағирәләр» шиғыры.

***«Шағирәләр»***

10) Бер мәлде Р.Бикбаевҡа бер хат килеп төшә. Ошо хат уға тел тураһында байтаҡ шиғырҙар яҙырға мәжбүр итә.

***“Письмо народу”***

11) Р.Бикбаев – публицистик мәкәләләр, тәржемәләр, шиғырҙар һәм поэмалар авторы. Шул поэмаларҙың береһе – «Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!» Поэма экологик проблемаларҙы күтәрә. Ул тәбиғәт ҡомартҡыларын һаҡларға саҡыра. Мәҫәлән, Шүлгән мәмерйәһен. Поэманан өҙөк тыңлайыҡ.

***«Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!»***

12) Р. Бикбаев яуаплы вазифаларҙы ла башҡара, ул Башҡортостан хөкүмәте Дәүләт ҡоролтайында депутат була. Кешеләрҙең төрлөһө менән осрашырға, уларҙың яҙмыштары хаҡында көрәшергә тура килә. Яҡшылары менән дә, ямандары менән дә.

***«Күңелемдә тыныс һуғыш бара»***

13) Һуңғы йылдарҙа Р.Бикбаев хәҙистәрҙе ентекле өйрәнә. Йәштәргә иман нуры хаҡында һөйләгән хәҙистәрҙе нисек еткерергә? Шиғри юлдар аша. Шулай итеп шағир Мөхәммәт ҡалдырған хәҙистәрҙе шиғри юлдарға һала. Берәүһен тыңлап китәйек.

***"Кеше булғас, булһын күркәм".***

14) Шағир төрлө республикаларға, илдәргә эш сәфәре менән сәйәхәткә сыға. Яҙыусылар, билдәле шәхестәр менән осраша. Ошоға бәйле төрлө тарафтар хаҡында һоҡланыуын йәшермәй. Бик матур шиғри әҫәрҙәр яҙа. Фәһемле һығымталар яһай.

"Сит ерҙә солтан булғансы, үҙ ереңдә олтан бул!" тигән мәҡәлде бөтәбеҙ ҙә беләбеҙ. Ә шағир нимә ти? Сит ерҙә солтан да булмайым, үҙ еремдә олтан да булмайым. Ә кем булырға тейеш ысын ир кеше?

***«Сит илдә солтан булғансы»***

15) Беҙ үҙ еребеҙ менән һоҡлана беләбеҙме, ошо ерҙә йәшәүебеҙгә ҡыуанабыҙмы, матурлыҡты күрәбеҙме? Тормош ығы-зығыһында беҙҙең улар хаҡында уйланырға ваҡыт та булмай һымаҡ. Был инде Р.Бикбаев шиғырҙарын тыңлау өсөн иң уңайлы мәл етте тигән һүҙ.

Р.Бикбаев –шағир патриот. Тыуған иле менән ғорурланып яҙған шиғырҙары унық иҫ китмәле күп. Береһе – «Башҡортостан».

16) Хөрмәтле бәйгелә ҡатнашыусылар. Шуның менән шиғри бәйгебеҙ тамаланыуға етә. Бөтәгеҙгә лә рәхмәт еткерәмен. Шиғырҙы аңлағанһығыҙ, уйланғанһығыҙ, бөгөнгө һеҙҙең тырышлыҡ бушҡа китмәҫ тип уйлайбыҙ.

Һүҙ – жюри ағзаларына.

Бөгөнгө жюри ағзаларына, ҡатнашыусыларға оло рәхмәт!Һеҙгә ҙур уңыштар, аҡ бәхеттәр, оҙон ғүмер теләйбеҙ.Бәйгеләрҙә тағын күрешербеҙ! Һау булығыҙ!